*Анфиса МӨХӘМӘТЙӘНОВА*

# Иңдәренә һалды ил ғәмен

Әлеге көндә баш ҡалабыҙ Өфөлә башҡорт мәктәптәре, лицейҙар, гимназиялар уңышлы эшләп килә. Уларҙың күбеһенең башҡорт мәктәбе булып китеүендә күренекле мәғрифәтсе Мөхәмәтғәли Исҡужиндың хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ.

Мөхәмәтғәли Исҡужин 1927 йылдың 23 мартында, ер оҙайлы ҡыштан арынып, иркен тын алған мәлдә, хозур тәбиғәтле Көйөргәҙе районының Үрге Мотал ауылында тыуған.

Атаһы Ғәли Исҡужинды бер ғәйепһеҙ ҡулға алалар һәм төрмәгә ябалар. Оҙаҡ ваҡыт ыҙалатып һорау алыуҙар, төрмәнең таш иҙәнендә ас-яланғас ятыуҙар, ғәйепһеҙгә хөкөм итергә тырышыуҙары ныҡ ҡаҡшата уны. Өйөнә әйләнеп ҡайта, әммә балалары, ҡатыны менән ҡыуанып оҙаҡ йәшәргә насип булмай. Шулай итеп, 1934 йылда әсәһе алты бала менән тороп ҡала. Әлбиттә, ул хәленән килгәнсә балаларын ҡыйынлыҡтарҙан ҡурсаларға, ас-яланғас итмәҫкә тырыша.

Мөхәмәтғәли бәләкәйҙән белемгә ынтыла. Әммә, тыуған ауылында мәктәп булмағанлыҡтан, туғыҙ йәшендә генә уҡырға төшә, сөнки тап ошо мәлдә яңы мәктәп асыла. Әлбиттә, мәктәпкә килгәнсе Мөхәмәтғәлиҙе ағаһы Тимерғәли уҡырға ла, яҙырға ла өйрәткән була. Шуға күрә уға уҡыу еңел бирелә, «дүртле», «бишле» билдәләренә генә өлгәшә. Уҡыу менән бергә әсәһенә ярҙам итергә лә өлгөрә, йәй етһә, мал көтә.

1941 йылдың йәйе ауыр көндәр алып килә. Ауылдағы ир-егеттәр һуғыш яланына оҙатыла. Тормош ҡарт-ҡоро, йәш-елкенсәк һәм ҡатын-ҡыҙ ҡулына тороп ҡала. Дүртенсе синыфты тамамлаған Мөхәмәтғәлигә лә уҡыуын ҡалдырып, колхозда эшләй башларға тура килә.

*Мөхәмәтғәли Исҡужин ғаиләһе менән*



1943 йылда әсәһенең ҡустыһы Мәһәҙей бригадир булып эшләгән Яҡуп ауылына күсеп киләләр. Сәсеү эштәре башланғансы, Мөхәмәтғәли алтынсы синыфта уҡып ала. Халыҡ нисек тә астан үлмәҫкә тырыша: һунарға йөрөйҙәр, балыҡ тоталар, емеш-еләк йыялар. Тап ошо мәлдә Исҡужиндар ғаиләһен Үзбәкстандың Сәмәрҡәнд өлкәһендә уҡытыусы булып эшләгән Тимерғәли ағаһы үҙенә саҡыра.

Йәйге матур көндәрҙең береһендә Мөхәмәтғәли Йәүҙәт ҡустыһы менән Көйөргәҙе йылғаһына мурҙа һала. Бәхеткә күрә, мурҙаларына байтаҡ балыҡ эләгә, өйҙәренә саҡ күтәреп алып ҡайталар. Үлсәп ҡараһалар — 16 килограмм балыҡ тотҡандар. Был хәбәр колхоз рәйесенә барып етә һәм ул, балыҡты үҙенә алып, алмашына бер тоҡ он бирә. Он булғас, икмәк бар, тигән һүҙ, малайҙар ҡыуанып бөтә алмай. Колхоздан китергә рөхсәт алғас, әсәләре, бар мөлкәтен тейәп, балаларын эйәртеп юлға сыға. Малайҙарҙың өҫтөндә иҫке кейем, аяҡтары яланғас. Шул килеш әллә нисә саҡырым йәйәүләп баралар. Хәйерсегә ел ҡаршы тигәндәй, июнь айы булһа ла ҡар яуып ебәрә. Ошо ҡар өҫтөнән дә ялан аяҡ атлай улар. Шулай ике көн ыҙалланғандан һуң, Ырымбур ҡалаһына килеп етәләр. Баҙарҙа ҡыуып килгән һыйырҙарын, кәзәләрен һатып, юллыҡ аҡса эшләйҙәр. Әсәләре малайҙарына ла кейем-һалым алып бирә. Ауырлыҡтар онотолғандай була.

Артабан Мөхәмәтғәлигә Тимерғәли ағаһы күп ярҙам күрһәтә. Тәүҙә ағаһы директор урынбаҫары булған мәктәптә сәркәтип вазифаһын башҡара, һуңынан башланғыс синыфтарҙа уҡыта башлай. 1944—1945 уҡыу йылы тамамланыу менән йәй көнө Ҡәттә-Ҡурған педагогия училищеһына ситтән тороп уҡырға инә. Был белем усағын тырыш егет тик «бишле»гә генә тамамлай.

Тәүге йылдарҙа башланғыс синыфтарҙа уҡыта, артабан уға математика, физика, география, хатта немец телен уҡытырға тура килә. Мөхәмәтғәли артабан белемен камиллаштырырға кәрәклеген яҡшы аңлай һәм 1949 йылда Сәмәрҡәнд ҡалаһындағы Үзбәк дәүләт университетының физика-математика факультетына уҡырға инә һәм уны ла уңышлы тамамлай.

Әлбиттә, Башҡортостанды һағына Мөхәмәтғәли, тыуған ерҙең һәр кем өсөн үтә ғәзиз икәнлегенә ошо мәлдә айырыуса яҡшы төшөнә. Ун ете йәшенән утыҙ өс йәшкә тиклем Үзбәкстанда йәшәһә лә, тыуған яғы үҙенә тарта. Айырыуса балаларының үзбәкләшеп йәки урыҫлашып китеүен теләмәй.

Шуға күрә 1960 йылда ғаиләһе менән Өфөгә ҡайта улар. Тәүҙә 1-се республика башҡорт интернат-мәктәбендә физика уҡыта, тәрбиәсе булып эшләй. Артабан «Кабель» тәжрибә-конструкторлыҡ бюроһына күсә. 1968 йылда Башҡортостан ғилми-тикшеренеү үҙәгендә мәғлүмәт бүлеге менән етәкселек итә.

Эше һәйбәт бара Мөхәмәтғәлиҙең, әммә үҙ илендә башҡортса һүҙ әйтергә оялған балаларҙы күреп, уларҙың киләсәге өсөн борсоулы уйҙар күңеленә тынғы бирмәй, йәштәрҙең урыҫлашып барыуына йөрәге әрней. Тап ошо мәлдә Өфө ҡалаһында күберәк башҡорт мәктәптәре асыу кәрәклеге хаҡында уйлана башлай. Ҡул ҡаушырып ултырырға яратмаған уҙаман эшкә лә тотона. Тик былдай мәктәп асыу ул заманда еңел булмай. Ата-әсәләр, әүҙем йәмәғәт эшмәкәрҙәре менән һөйләшергә, уларҙың ризалығын алырға, икеләнгәндәрен күндерергә, өмөтләндерергә, киләсәккә ышаныс уятырға тура килә. Ниһайәт, 1970 йылда байтаҡ ҡаршылыҡтар, ҡыйынлыҡтар кисергәндән һуң, Иҙел Агишев, Әмир Сиражетдинов һәм Хәниф Вәлиевтарҙың тырышлығы менән Өфөлә беренсе ҡала башҡорт мәктәбе — 20-се мәктәп — хәҙер Ф.Мостафина исемендәге башҡорт гимназияһы — асыла.

1972—1973 уҡыу йылы башында ошо башҡорт мәктәбе физика уҡытыусыһыҙ тороп ҡала. Мөхәмәтғәли Исҡужинды шул урынға саҡыралар. Баш ҡалалағы берҙән-бер башҡорт мәктәбенең яҙмышына битараф бул-

маған Мөхәмәтғәли Ғәли улы был үтенесте кире ҡаға алмай — 11 йыл буйы абруйлы вазифа биләһә лә, уҡытыусы эшенә кире ҡайта. Үҙ фәнен яҡшы белгән, балаларҙы ихлас үҙ иткән уҡытыусы уҡыусыларында физика фәненә ҡыҙыҡһыныу уята. Ике йыл да үтмәй, 20-се мәктәп ҡалала һәм республика кимәлендәге олимпиадаларҙа бер-бер артлы призлы урындар яулай. Мөхәмәтғәли Ғәли улының уҡыусылары Мәскәү, Ленинград, Өфө юғары уҡыу йорттарына күпләп уҡырға инә башлай.

Һикһәненсе йылдарҙа илебеҙҙә сәйәси үҙгәрештәр, милли мәҙәниәттәрҙе тергеҙеү һәм үҫтереү буйынса ижтимағи хәрәкәт әүҙемләшә. Баш ҡалабыҙ Өфөнөң Нефтселәр мәҙәниәт һарайында «Аҡ тирмә» милли мәҙәни клубы һәм «Урал» башҡорт халыҡ үҙәге ойошторола. «Аҡ тирмә» йыйылышында Мөхәмәтғәли Исҡужин башҡорт балалар баҡсаларын ойоштороу комиссияһының рәйесе итеп тәғәйенләнә. Тирә-яҡ мөхит, өйҙә, ғаиләлә туған телдә аралашыу балаға ныҡ тәьҫир итеүен раҫлап торорға кәрәкмәйҙер. Шуға күрә башҡорт балалары башҡорт балалар баҡсаһына йөрөргә тейеш. Әүҙем эшмәкәрҙәр байтаҡ көс сарыф иткәндән һуң 329-сы балалар баҡсаһын башҡорт балалар баҡсаһы итергә вәғәҙә ала. Әммә унда 5 башҡорт һәм 7 урыҫ төркөмө булдырыла. Ҡыҫҡаһы, өмөт аҡланмай. 1990 йылда Өфөнөң Инорс биҫтәһендәге 121-се мәктәп-гимназияһында һәм Сипайлово биҫтәһендәге 38-се, 29-сы, 84-се мәктәптәрҙә башҡорт синыфтары асыла.

1993 йылда Мөхәмәтғәли Исҡужин Башҡорт йәштәре иттифағының мәғариф эштәре буйынса инструкторы вазифаһын үтәй. Эшенән илһам ала, рухи йәһәттән ҡәнәғәтлек кисерә ул. 1994—1995 йылдарҙа Өфө ҡалаһында 136-сы башҡорт мәктәп-лицейын, Шаҡшала 122-се башҡорт гимназияһын, Күмертауҙа 13-сө башҡорт мәктәбен һәм «Айгөл» балалар баҡсаһын, Салауатта 25-се башҡорт гимназия-мәктәбен һәм «Йәншишмә» башҡорт балалар баҡсаһын астырыуға өлгәшәләр.

Тап Мөхәмәтғәли Исҡужиндың тырышлығы менән Өфөнөң Инорс биҫтәһендә 1989 йылдан бирле алып барылған әүҙем эштәр һөҙөмтәһендә 825 урынлыҡ мәктәп 1996 йылдың сентябрь айында 140-сы башҡорт мәктәп-гимназияһы булып ишектәрен аса.

Бына шулай киләсәк быуын үҙ телендә уҡыһын өсөн нигеҙ һалына. Ошо ныҡышмал, тәүәккәл кеше булмаһа, Өфөлә башҡорт мәктәптәренең яҙмышын күҙаллауы ҡыйын. 2000 йылдың февралендә халҡы, иле, теле өсөн янып йәшәгән уҙамандың бөтә донъяны үҙенә һыйҙырған изге йөрәге тибеүҙән туҡтай. Шуныһы күңелде ҡыра: йыш ҡына үҙҙәре иҫән саҡта арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең хеҙмәте тейешенсә баһаланмай. Мөхәмәтғәли Исҡужинға ла «Башҡортостан Республикаһының халыҡ мәғариф отличнигы» тигән маҡтаулы исем ул гүр эйәһе булғас ҡына бирелде.

Әммә халыҡ үҙ улын онотмай. Ул — М.Аҡмулла исемендәге премия лауреаты. Әлеге көндә 136-сы башҡорт мәктәп-лицейына Мөхәмәтғәли Исҡужин исемен биреү мәсьәләһе хәл ителә. Цюрупа урамында 1965—2000 йылдарҙа ул йәшәгән 93-сө йортта мемориаль таҡтаташ ҡуйылған.

Күренекле мәғрифәтсе Мөхәмәтғәли Исҡужиндың башланғысы нигеҙендә бөгөн башҡорт балалар баҡсалары, башҡорт мәктәптәре, лицейҙары, гимназиялары уңышлы эшләп килә. Башҡорт балалары иркенләп үҙ телендә һөйләшә. Халҡыбыҙҙың, телебеҙҙең киләсәге өсөн тырышҡан, йәнен фиҙа ҡылырға әҙер торған ир-уҙамандар булғанда киләсәк тә өмөтлө, яҡты.